ПУБЛИЦИСТИКА

*Миләүшә* ***ҠОЛМӨХӘМӘТОВА***

# Зәңгәр күк аяҙ булһын!

Мин, Ҡолмөхәмәтова Миләүшә Мотиғулла ҡыҙы, һуғыштан һуң 12 йыл үткәс тыуған, Ишембай районы Ҡанаҡай ауылында үҫкән ҡыҙмын, хәҙер үҙем дә күптән өләсәймен инде. Хәйер, быға аптырарға түгел: һуғыш ваҡытында тыуған балалар ҙа хәҙер һикһәнгә етеп бара.

Минең балалығым социализм осорона тура килде, беҙ йәшәгән дәүерҙә патриотик тәрбиә беренсе урында ине. Мәктәптә, университетта Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары менән осрашыуҙар, инша яҙыу конкурстары, спорт ярыштары даими рәүештә ойоштороп торғайны. Шуға күрә беҙҙең быуын һуғышта үлем менән күҙгә-күҙ осрашҡан яугирҙарҙы күреп-белеп үҫте. 1971 йылда “Башҡортостан пионеры” гәзите редакцияһы тыуған ил һәм тыныслыҡ темаһына республика иншалар конкурсы иғлан иткәс, унда мин дә дәртләнеп ҡатнаштым. Һөҙөмтәлә тыныслыҡ темаһын сағылдырған “Тыуған ил һағында торған һалдат уйҙары” тигән иншам призлы урын яуланы.

9 Май — халҡыбыҙ өсөн иң бөйөк байрам, уны юҡҡа ғына “Это праздник со слезами на глазах” тимәйҙәр, мин үҙем дә һуғышта яҡындарын юғалтҡан туғандарым, ауылдаштарымдың ҡайғы-хәсрәтен белеп-күреп үҫкәнгәмелер, был көндә күҙ йәштәрен тыя, һуғыш йырҙарын тыныс ҡына тыңлай алмайым. Минең өсөн һуғыш — ауылдаштарымдың моңһоу иҫтәлектәре, ирҙәре, улдары һуғыштан ҡайтмаған, күңелдәре яралы инәй-апайҙарҙың һығылып илауҙары, күршем Гөлйәүһәр инәйҙең 1945 йылдың майында Берлинда һәләк булған иренең хаттарын тотоп өйҙән-өйгә йөрөп уҡыуҙары, яуҙа батырҙарса һуғышып, аяҡ-ҡулдарын ҡалдырып ҡайтҡан ауылдаштарым Хисам бабайҙың, һыңар ҡуллы Ғәйсар бабайҙың ат ҡыуып эшкә сығып китеүҙәре, атайымдың орден-миҙалдарын тағып барған митингтан ҡайтҡас илауҙары, Башҡорт атлы кавалерия дивизияһында политрук булып хеҙмәт иткән уҡытыусыбыҙ Сабирйән Вилдановтың мәктәптә, орден-миҙалдар тағылған костюмын кейеп, уҡыусылар алдында сығыш яһауҙары менән иҫтәлекле. Уларҙы нисек онотаһың инде? Әле ошо юлдарҙы ла күҙ йәштәрен түкмәйенсә яҙа алмайым, яҡындарымдың барыһы ла кисә генә күргән кеүек күҙ алдында тора.

Беҙҙең Ҡанаҡай ауылынан Бөйөк Ватан һуғышында 162 кеше ҡатнаша, 74-е әйләнеп ҡайтмай. Һәләк булыусылар араһында колхоз председателе Павел Кузнецов, тәүге колхозсылар Ғизетдин Кәримов, Сәғит Абыҙгилдин, олатайым Фәтҡулла Баймөхәмәтов һәм башҡалар бар.

Ауылыбыҙҙа Бөйөк Ватан һуғышына тотош ғаиләләре менән киткәндәр ҙә бар: улар араһында Ленинградты обороналауҙа ҡатнашып, беренсе төркөм инвалиды булып ҡайтҡан ауылдашыбыҙ Абыҙгилдин Дәүләткәрәй, Минлеәхмәт Хәсәнов, Сабирйән Вилданов һәм башҡаларҙы атарға мөмкин. Ауылдашыбыҙ Минлегәрәй Хәсәновтың бер юлы ике улы яуға китә, тик Сәлимгәрәй әйләнеп ҡайтмай, ә Минлеәхмәт һуғыштан һуң өс бригаданы берләштергән элек-ке "Коммунизм" колхозының председателе булып китә. Гвардия сержанты Минлеәхмәт Хәсәнов данлыҡлы 214-се уҡсылар дивизияһында Сталинград өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Әгәр дивизия командиры генерал-лейтенант Н.И.Бирюков сценарий авторы булған ике сериялы "Гуля Королева" кинофильмын, "Дүртенсе бейеклек" ("Четвертая высота") тигән китапты уҡыһағыҙ, унда барған хәтәр ваҡиғалар уртаһында ауылдашыбыҙ Минлеәхмәт Хәсәнов та ҡайнаған. Батырлығы өсөн ауылдашыбыҙ Ватан һуғышы ордены һәм миҙалдар менән наградлана.

Дәһшәтле һуғыш йылдарында ҡанаҡайҙар тылда "Барыһы ла фронт өсөн, барыһы ла еңеү өсөн!", "Фашист оккупанттарына — үлем!" тигән лозунг аҫтында ал-ял белмәй тырышып эшләй. Тик 60-сы йылдарҙа ғына ауыл уртаһына һәләк булғандар рухына арнап һәйкәл ултыртыла. Бөгөн иһә ошо һәйкәл янында тороп һөйләрлек бер генә тере ветеран да юҡ: ауылыбыҙҙағы берҙән-бер иҫән ветеран Әүхәҙи Миңлеғолов та хәҙер туҡһанды тултырыусы оло кеше, шул сәбәпле осрашыуҙарға йөрөй алмай.

Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Минлеәхмәт Хәсәнов хаҡында, ғөмүмән, бер һүҙ менән генә һөйләп булмай. Һуғыштан һуң ул күп эшләй, белемен арттыра, 1955 йылдың февралендә партияның Маҡар райкомы тарафынан һуғыш емереклектәрен бөтөрөү һәм ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу маҡсатында ойошторолған партия һәм совет работниктарының "Утыҙ меңселәр" район активы составына инә. Йәштән эшһөйәр һәм намыҫлы М.Хәсәнов һуғыштан һуң башта колхоз хисапсыһы була, артабан Маҡар райкомы инструкторы, шунда уҡ бүлек мөдире булып эшләй. 1953 йылда өлкә партия мәктәбендә уҡый. Тап шул йылдарҙа ул Ҡанаҡайға ҡайтып эшләү, ауылдаштарҙы яҡшыраҡ йәшәтеү хаҡында хыяллана. 1955 йылда "Ҡыҙыл таң" колхозының рәйесе итеп һайлана.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа "Ҡыҙыл таң" колхозы үтә лә фәҡир була. Хеҙмәт көнө өсөн түләү булмай, хужалыҡта үҫтерелгән бөтә иген, йәшелсә, малсылыҡ продукттары хөкүмәткә оҙатылып тора. Иген дә, аҡса ла тәтемәй колхозсыларға. Хәсәнов колхозды ҡабул итеп алғанда унда ни бары 226 мең 854 һум аҡса була, игендең гектарынан ни бары 4,5 центнер уңыш йыйып алалар, фураждағы бер һыйырҙан 1231 литр һөт һауыла, һауын һыйырҙар ҙа 35 баштан артмай... Бына ошондай ауыр хәлдә ҡабул итеп ала М.Хәсәнов колхозды. Колхоз председателенә лә, колхозсыларға ла емерек, хәлһеҙләнгән хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу өсөн көнө-төнө тырышып эшләргә тура килә. Ләкин яңы хужа ауырлыҡтарҙан ҡурҡмай, алдынғы колхоздарҙың эш ысулдарын, республиканың ныҡлы һәм алда барған хужалыҡтарының эш тәжрибәһен өйрәнеп, төрлө яңылыҡтар индерә, уларҙың етәкселәре менән осраша, колхозда тарҡалған хеҙмәт тәртибен күтәреүгә ҙур көс түгә. Сәсеүлектәрҙең һәм малсылыҡтың продуктлылығын арттырыуға ирешә, механизаторҙар, малсы-

лар, һауынсылар, сөгөлдөрсөләр менән кәңәшләшеп эшләй. Бына шулай халыҡ менән даими һөйләшеп-аралашып тороу, агрономик, зоотехник ҡағиҙәләрҙең ябай ғына талаптарын үтәү, алдынғы эш ысулдарын өйрәнеү үҙ һөҙөмтәһен бирә. Яйлап хужалыҡта хеҙмәт күрһәткестәре күтәрелә башлай. 1959 йылда күрше Сталин исемендәге колхоз менән ҡушылып, "Коммунизм" исемле яңы колхоз төҙөйҙәр.

Был ваҡытта инде колхоз нығынғандан-нығына бара. 1960 йылда "Коммунизм" колхозы игендең һәр гектарынан — 13,4 центнер, шәкәр сөгөлдөрөнән — 164, кукуруздан 224 центнер уңыш йыйып ала. Дәүләткә иген һатыу планын 122 процентҡа еткереп үтәй. Малсылыҡта ла эштәр көйлө бара. Һәр һыйырҙан 2003 кг һөт һауып алына, был һан ул ваҡытта район буйынса 1913 килограмм була. Дәүләткә ит, һөт, йөн һатыу буйынса ла планды арттырып үтәйҙәр ҡанаҡайҙар.

Ишембай районында ғына түгел, хатта тотош республика кимәлендә ихтирам яулаған коммунист М.Хәсәнов КПСС-тың Өлкә комитеты ағзаһы, партияның 19-сы Өлкә конференцияһы делегаты, 1965 йылдан башлап Ишембай ҡала комитеты ағзаһы, 1953 йылдан Ишембай районы советы депутаты ла булды. Уның хеҙмәт уңыштары, йәмәғәт эштәре тураһында яҙыусы Рәшит Солтангәрәев "Ер улы" тигән очерк баҫтырҙы. Кендеге менән ергә береккән, тыуған ауылын, тыуған ерен өҙөлөп һөйгән, үҙе лә егелеп эшләгән һәм башҡаларҙы ла эшләтә, ойоштора белгән яугир колхоз рәйесе М.М.Хәсәновтың тырыш хеҙмәтен хөкүмәтебеҙ лайыҡлы баһаланы: һуғыш һәм хеҙмәт ветеранының күкрәген ике Ленин, Октябрь революцияһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары, ВДНХ, "Сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү" миҙалдары биҙәй.

Яугир ауылдашыбыҙ М.Хәсәнов күптән донъяла юҡ инде, ләкин халыҡ уның исемен әле лә ҙур хөрмәт менән телгә ала, үҙҙәренә өлгө итеп ҡуя. Мин Ҡанаҡай мәктәбендә уҡыған йылдарҙа М.Хәсәнов ағай уҡыусылар алдында йыш сығыш яһай торғайны, "Батырлыҡ мәктәбе" осрашыуҙары беҙҙә, йәш быуында, илһөйәрлек тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнағандыр, тип уйлайым.

Тағы ла бер ауылдашыбыҙ Сабирйән Вилданов 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында генерал Шайморатов менән бергә һуғыша, ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградлана, Волганан Эльбағаса юл үтә. Бөйөк Еңеү көнөн Германияла ҡаршылай, артабан Алыҫ Көнсығышта Квантун армияһын ҡыйратыуҙа ҡатнаша. 105-се артиллерия дивизияһының политбүлек начальнигы булып хеҙмәт итә. Һуғыштан ул 1947 йылда ғына әйләнеп ҡайта һәм илле йылға яҡын ғүмерен балалар тәрбиәләүгә арнай. Уҡытыусыбыҙҙы хаҡлы ялға оҙатҡандарын мин бик яҡшы хәтерләйем — уға иҫтәлеккә ябай ғына будильник бүләк иткәйнеләр. Аҙаҡ, мин студент булып киткәс, уҡытыусым менән хат яҙышып торҙоҡ, С.Вильданов ағай тураһында "Восход" (хәҙерге "Торатау") исемле район гәзитенә мәҡәлә яҙҙым, был хаттарҙың да ҡайһы берҙәре, бәхеткә ҡаршы, һаҡланып, бөгөнгө көнгә тиклем килеп еткән.

Ҡолмөхәмәтовтарҙан һуғышта бөтәһе биш кеше ҡатнаша. Олатайым Фәтҡулла Рокоссовский армияһында разведчик булып хеҙмәт итә. Сираттағы бер операциянан ҡайтҡанда батырҙарса һәләк булғас, башта уны хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенә индерәләр. Ауылға "ҡара ҡағыҙ" килә... Тик һуғыштан һуң ғына ҡустылары Яҡуп Ҡолмой менән Хисмәтулла һәм оло улы Рәхмәтулла

Ҡолмөхәмәтовтар юллап, уның 1943 йылдың 12-се октябрендә Белоруссияла, Могилев өлкәһендә батырҙарса һәләк булғанын белә. Фәтҡулла олатайымдың исеме Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусылар исемлегенә ингән, ошо өлкәнең Ленин районына ҡараған Староселье ауылындағы туғандар ҡәберлегендә ерләнгән. Мин бала саҡта Яҡуп Ҡолмой менән Рәхмәтулла Ҡолмөхәмәтов бабайымдар унан һары тупраҡ алып ҡайтҡас, шундай ҙа тупраҡ була икән, тип шаҡ ҡатҡайнылар...

Фәтҡулла олатайым һуғышҡа Ғәйфулла, Рәхмәтулла исемле ике улы менән бергә китә, кинйә улы — атайым Мотиғулла Фәтҡулла улы иһә 1942 йылда китә, сөнки йәше етмәй тора. Оло улы Ғәйфулла һуғышҡа мәктәптә эшләгән еренән китә, башта Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғыша, һуңынан яҙмыш уны алыҫ Югославияға ташлай: унда Ғәйфулла Ҡолмөхәмәтов партизан була. Тыуған яҡҡа 1945 йылда офицер дәрәжәһендә әйләнеп ҡайта, һуғыштан һуң Ҡанаҡай мәктәбендә хеҙмәт дәрестәрен уҡыта.

Фәтҡулла олатайымдың икенсе улы Рәхмәтулла десант ғәскәрҙәрендә һуғыша, дошман тылына “тел”гә йөрөй, сослоғо һәм ҡыйыулығы өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, миҙалдар менән наградлана. Һуғыштан һуң Рәхмәтулла Өфөлә төпләнә, юғары техник белем алып, заводта инженер булып эшләй. Фәрихә еңгә менән Рөстәм, Азамат исемле ике ул тәрбиәләй. Ҡатыны иртә үлеп киткәс, балаларҙы яңғыҙ үҫтерә. Улдарының икеһе лә юғары белем ала: Рөстәм — Өфө авиация институтын, Азамат Мәскәү халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтын ҡыҙыл дипломға тамамлай — бөгөн ул Сирияла Рәсәй Федерацияһының Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе, Рәсәй Президенты Владимир Путин тарафынан “Ҡаһарманлыҡ” ордены менән наградланды.

Фәтҡулла олатайымдың төпсөк улы, атайым Мотиғулла Ҡолмөхәмәтовҡа һуғыш башланғанда 16 йәш тә тулмай, шуға 1942 йылда ғына алып китәләр. Башта Харьковта элемтәселәр курсында уҡый, унан Икенсе Украина фронты менән Берлинғаса барып етә, ике тапҡыр “Батырлыҡ өсөн” һәм башҡа миҙалдар менән наградлана. Болгария, Чехословакия, Румыния, Венгрия, Австрия, Югославия, Германияны үтә, һуғышты Берлинда тамамлай. “Праганы азат иткән өсөн” (1945), “Германияны еңгән өсөн”, “Варшаваны азат иткән өсөн”, “Берлинды алған өсөн”, “Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн” (1948), “СССР Ҡораллы көстәренә 50, 60 йыл” (1967, 1979), “Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 30 йыл” (1975), Сталиндың ҡултамғаһы менән бер нисә грамота, ә тыныс тормошта “Хеҙмәттәге ҙур уңыштары өсөн” миҙалы (1966), “Почет билдәһе” ордены (1973) менән бүләкләнә.

Атайым һуғыштан һуң колхозда эшләне, ауыл советы депутаты, колхоз идараһының ревизия комиссияһы ағзаһы булды, күп тапҡырҙар Мәскәүҙә ВДНХ-ла ҡатнашты, ҡиммәтле бүләктәргә лайыҡ булды. Ағаһы Я.Ҡолмой уға арнап композитор Таһир Кәримов музыкаһына “Көтөүсе йыры”н ижад итте, яҙыусы Динис Бүләков “Ағиҙел” журналына “Ҡаратал буйында” тигән очерк яҙҙы, район гәзите “Восход”та фотоһы менән мәҡәлә бирҙе — ул әле лә архивымда ҡәҙерләп һаҡлана.

Фәтҡулла олатайымдың бер туған ҡустыһы шағир Яҡуп Ҡолмой генерал Доватор етәкселегендәге кавалерия дивизияһында һуғыша, Мәскәүҙе һаҡлауҙа ҡатнаша, батырлығы өсөн икенсе дәрәжә Ватан һуғышы ордены һәм

миҙалдар менән наградлана. Әле һуғышҡа тиклем үк шағир булып танылған Яҡуп Ҡолмой яу тынған арала яҙылған әҫәрҙәрен Ҡанаҡайҙа йәшәүсе атаһы Хәйруллаға (атайымдың олатаһы) һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Рәшит Ниғмәтигә ебәреп тора. Һуңынан улар фронт шиғырҙарынан торған ике йыйынтыҡ булып 1942, 1944 йылдарҙа донъя күрә, 1944 йылда Я. Ҡолмойҙы Яҙыусылар союзына ағза итеп алалар. Генерал Доваторҙың кавалерия дивизияһы, Мәскәүгә ынтылған немец танктарына ҡаршы ебәрелеп, тотошлайы менән тиерлек һәләк була. Йөҙгә яҡын кеше тере ҡалғандар араһында Яҡуп Ҡолмой ҙа була.

Фәтҡулла олатайымдың тағы ла бер ҡустыһы Хисмәтулла Хәйрулла улы Ҡолмөхәмәтов башта Бәләбәйҙә ойошторолған алты айлыҡ политруктар курсында уҡый, артабан Калинин фронтының 373-сө уҡсылар дивизияһында татар-башҡорттар өсөн нәшер ителгән “Алға, дошманға ут ас!” (“Вперед, бей врага!”) тигән фронт гәзитендә тәржемәсе һәм хәбәрсе була, унда Шәйхи Маннур, Афзал Шамов һ.б. татар яҙыусылары менән бергә эшләй. ”Батырлыҡ өсөн” миҙалы менән наградлана. Һуғышта һыуыҡтарҙа окоптарҙа ҡунып, умыртҡа туберкулезы эләктерә һәм ҡаты ауырый. 1943 йылдың көҙөндә II төркөм инвалидлығы биреп, уны ҡайтарып ебәрәләр.

1943—1948 йылдарҙа Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов “Ҡыҙыл Башҡортостан” гәзитендә ауыл хужалығы бүлеге мөдире була, ләкин Сталин репрессияһына эләгә: юҡ ғәйептәр тағып, Воркутаға лагерға ебәрәләр. Сталин үлгәндән һуң аҡлана, яңынан эшенә ҡайтарыла. “Совет Башҡортостаны” гәзитендә 1953—1965 йылдарҙа эшләп, хаҡлы ялға сыға. Тырыш хеҙмәте өсөн “Почет билдәһе” (1970) ордены һәм дүрт миҙал менән наградлана. Һаулығы ҡаҡшаған булһа ла, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем һөйөклө һөнәре — гәзиттән айырылмай, 75 йәшенә тиклем ҡулынан ҡәләмен төшөрмәй. Нисек кенә һыҙланмаһын, бөкөрәйеп ултырып булһа ла ижад итә. Окоптарҙа һәм Сталин лагерҙарында ҡаҡшаған һаулығын ҡабаттан ҡайтара алмай. “Совет Башҡортостаны” гәзите биттәрендә ул республикабыҙҙың эшһөйәр кешеләрен ҙурлай, илгә ирек яулаған яу батырҙары хаҡында очерктар, портреттар ижад итә. Улар араһында ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, башҡорт атлылары дивизияһында һуғышҡан сержант Ғәбит Әхмәтов, артиллерист Ғимай Шәйәхмәтов, капитан Ғәли Бирҙин, танкист Зәйләғи Ноғманов, ябай һалдат Григорий Пулькин кеүек яҡташтарыбыҙ, башҡорт әҙәбиәтендә яҡты йондоҙ булып ҡалған яугир-журналистар Низам Ҡәрипов, Мостафа Садиҡов, Мәжит Буранғолов, Мөтиҡ Мәхмүтов һәм башҡалар бар. Очерктары “Китап” нәшриәте нәшер иткән “Башҡортостан батырҙары” йыйынтығына ингән.

### Тыл батырҙары

Һуғыш йылдарында тылда ла ауыр булған. Тыл ныҡ булмаһа, үҙенән-үҙе генә еңеү килмәҫ ине. Шул хаҡта әсәйем Ғәлимә Сәхәүетдин ҡыҙы Латипованың беҙгә, балаларына илай-илай һөйләгән иҫтәлектәрен хәтергә төшөрәм, һөйләгәндәрен яҙып алғанса, һүҙмә-һүҙ килтерәм.

“Эй, ул һуғыш касафаты... Шуның арҡаһында хәҙер һыҙланып ултырам. Хәҙер уйлайым-уйлайым да, үҙ-үҙемә аптырап ҡуям: ул көстө ҡайҙан алдыҡ

икән, тим? Шул тиклем дә ауырлыҡтар, аслыҡ-яланғаслыҡ аша, йә, ошо йәшкә ет инде?!

...Һуғыш башланғанда миңә 15 кенә йәш ине. Тал сыбығы кеүек кенә ҡыҙ бала инем. Ирҙәр һуғышҡа китеп бөткәс, бик иртә колхоз эшенә егелдек, ауылда ҡарт-ҡоро, йәштәр, бала-саға ғына ҡалды. Ҡалайтаһың, тырышаһың инде, ятып үлеп булмай бит, учетчик та, тракторист та булдым, яланда иген иктек, бесән саптыҡ, арыш һуҡтыҡ, трактор ремонтланыҡ, бәрәңге үҫтерҙек. Һуғыш йылдарында, унан һуң да бәрәңге икенсе әпәй булды. Яҙын серегән бәрәңге йыя торғайныҡ, уны тапһаң, эй ҡыуанаһың әле ул! Ипләп кенә алып ҡайтаһың. Әсәйем, бахыр, шуны таҙартып, һөткә, ҡатыҡҡа бутап ҡоймаҡ ҡоя. Яҙға баҫтыңмы — йыуа, ҡаҡы, балтырғанға сығабыҙ, үлән ашап йән аҫырайбыҙ...

Беҙ, үҫмер ҡыҙҙар, гел ирҙәр эшен эшләнек. Ленинградтан эвакуацияға килгән “блокадниктар” бүлеп бирҙеләр: беҙгә лә бер ғаилә беркетелде. Халыҡты таратып бөткәс, колхоз эшенә өйрәттек. Эш рәтен белмәйҙәр бит тегеләр, мин бригадир булып эшләгәс, өйрәтергә ҡуштылар. Етмәһә, тәржемәсе лә булып йөрөнөм, эшкә лә ҡуштым, улар мине Галя тип йөрөттөләр. Күрмәгән нәмә, эшләмәгән эш ҡалманы инде ул һуғыш йылдарында.

“Блокадниктар” ауылға матур итеп кейенеп килгәйнеләр, башта үҙҙәрен, ҡаланыҡы булғас, эре генә тотҡан булдылар. Икмәк-тоҙ тотоп, һарыҡтар һуйып, алдарына бал-май ҡуйып, яңы бешкән әпәй тотоп ҡаршыланыҡ — 1941 йылда аҙыҡ-түлек бар ине әле. Әйтәгүр, ашамаған булдылар башта, аҙаҡ өй беренсә теләнселәп йөрөп, кейемдәрен картуфҡа, онға, күкәйгә, икмәккә алмаштырып ашанылар. Һуғыш бөткәс, Ленинградҡа ҡайтып киткәйнеләр, моңһоу булып ҡалды барыбер...



Бригадирға таяҡтың башы мул төшә. Машина юҡ, ат юҡ. Ат булмағас, ҡатын-ҡыҙ һабанға үҙе егелде. Бөтә нәмә һуғышҡа ебәреп торола. Ҡышын ойоҡ-бейәләй, свитер бәйләп, быйма баҫып ебәрәбеҙ, үҙебеҙ — ас-яланғас. Өҫтә кейем, өйҙә ашарға юҡ. Һөтөн, майын, итен, бәрәңгеһен — барыһын да һуғышҡа ебәреп торҙоҡ. Бәрәңгене киптереп ебәрә торғайныҡ. Бүләк менән бергә ҡыҙҙар хат яҙып һалып, шулай һалдаттар менән танышып китә торғайнылар.

Һуғыш йылларында закондар ҡаты булды. Бер ус он, иген өсөн лагерға ебәрә торғайнылар. Аслыҡтан ғаиләләре менән ҡырылғандар ҙа күп булды...

Ат булмағас, Стәрлегә йәйәү йөрөйбөҙ, бер тоҡ игенде яурыныңа һалаһың да, "тәпәй турат" менән һыпыртаһың. Тейешле сәғәтенә алып барып еткерергә кәрәк! Әсәй, бахыр, йәлләп, кеҫәгә тары өшәһеме шунда, алабута икмәгеме ҡыҫтырып ебәргән була. Алабутаны ҡул тирмәнендә әйләндереп, һөт-ҡатыҡ бутап бешерә торғайны. Уныһын ашарлыҡ түгел, ауыҙҙы өтөп бара, үҙе кирбес кеүек ҡата! Ҡалайтаһың, астан үлмәйем, тиһәң, ашайһың.

Бер ваҡыт Стәрлегә бисәләр, арҡаларға тоҡтар йөкмәп, орлоҡ алырға киттек. Мин бригадир бит инде, яуаплы кеше. Ағиҙел яҙын ажғырып таша. Кисеп сыҡмалы түгел, паромға ултырып сығабыҙ. Уға өлгөрмәһәң — орлоҡ эләкмәй, сират ҙур. Ә буш ҡайтырға ярамай. Ауылдан иртәнге биштә тороп киткән ҡыҙҙар, сират тороп, бер ваҡыт паромға һуңлап ҡалдыҡ. Яр буйында усаҡ яғып, өйҙән алып килгән көлсәләрҙе ашап, яҙғы һыуыҡ ергә ятып йоҡлап, өшөп-ҡатып төн сыҡтыҡ. Бәләкәй балалары булған бисәләр, тиҙерәк ҡайтып китеү ниәте менән Иҙелде кисеп сығабыҙ, тип батып үлгәндәре лә булды. Ас булһаң да, орлоҡҡа тейергә ярамай. Аслыҡтан бер ус иген урлап, төрмәлә серегәндәр ҙә күп булды. Өйгә ҡайтҡас, сапҡан үлән кеүек йығылаһың, ашарға ла хәл юҡ. Әсәйем, бахыр, туңып ҡатҡан аяҡтарҙы ыуып маташҡан була...

Һуғыштан һуң, 1946 йылда атайыңа барҙым. Ярлы ғына йәшәп киттек. Мейесһеҙ өй әтмәләп индек, ике йыл "буржуйка" менән файҙаландыҡ. Уның, ни, йылыһы сыға ла бөтә. Өй һыуыҡ булғас, тәүге ике сабыйыбыҙ үпкәләренә һыуыҡ тейеп үлде. Шунан атайың менән яңы өй һалып инергә булдыҡ. Ул



ваҡытта урман ҡырҡырға рөхсәт итмәнеләр. Эләктеңме, штраф та һалып тормайҙар, лагерға оҙаталар. Атайыңдың ҡырҡҡан бүрәнәләрен төндә һөйрәп алып ҡайтабыҙ ҙа ай яҡтыһында ергә күмәбеҙ. Шуны кемдер милицияға әйткән бит, килеп тә еттеләр, атайыңды алып та киттеләр. Ҡолбулды Аҡбулатов исемле кеше ул ваҡытта, кашауайҙар егеп, председатель булып йөрөнө. Өйгә килеп, атайыңдың яғаһына йәбеште был. Саҡ аралап ҡалдым, барыбер төрмәгә алып киттеләр атайыңды. Шул йәй баҡса тултырып көнбағыш сәскәйнек, шуны йыйып, Стәрле баҙарында стаканлап һатып, әҙерәк аҡса йыйып, адвокат ялланым. Судта ул атайыңды яҡлап сығыш яһаны. Дөрөҫөн әйткәндә, атайыңды һуғышта алған орден-миҙалдары ҡотҡарҙы, ҡыҙым. Үҙем дә: “Һуғышта ҡан ҡойоп ҡайтҡан кешенең төрмәлә ултырырлыҡ ғәйебе юҡ!” — тип яҡлап сығыш яһаным. Орден-миҙалдарын алып барғайным — шуларҙы сығарып күрһәттем”.

Ауылдашым, нәҫелдәшем журналист Хисмәтулла Хәйрулла улы Ҡолмөхәмәтовтың ҡыҙы Мәрйәм апайҙың иҫтәлектәре лә фәһемле, үҙе иҫән саҡта яҙып алған хәтирәләрен уҡыусыларға һүҙмә-һүҙ килтерәм.

“1942 йылда мин етенсе класты тамамлағайным, артабан уҡыу тураһында уйламаныҡ. Малайҙар һөнәрселек училищеһына китте, сөнки эшсе ҡулдар етешмәй ине. Беҙ, етенсене бөткән 12 ҡыҙ, Өфөләге 680-се номерлы заводҡа прессовщица булып эшкә урынлаштыҡ. Унда алты йыл эшләнем. Бәхеткә ҡаршы, барыбыҙ ҙа комсомол-йәштәр бригадаһына эләктек. Исеме хәҙер хәтерҙә ҡалмаған инде, Курбатова фамилиялы бригадир начальнигыбыҙ ине. 1942 йылда бригадирыбыҙға ни бары 25 кенә йәш булған, ә беҙ уны шул тиклем өлкән күрә торғайныҡ! Аҙаҡ бик тиҙ дуҫлашып киттек, йәш айырмаһы ла юғалды. Эй, күп эшләй торғайныҡ, ныҡ тырыштыҡ. Ул ваҡыттарҙы уйлаһам, хәҙер үҙем дә аптырап ҡуям: шул тиклем дә көс-энергияны ҡайҙан алдыҡ икән? Күрәһең, йәшлек менән һиҙмәгәнбеҙҙер инде, көндөҙ эшләп арып ҡайтһаҡ та, тамаҡ ялғап, аҙыраҡ ял итеп алабыҙ



ҙа, тағы ла төнгө сменаға йүгерәбеҙ. Тик төнгөлә ифрат арыта, йоҡо баҫа. Шундай ваҡыттарҙа өлкәндәр ярҙамға килә торғайны, беҙҙең урынға үҙҙәре станокка баҫып, аҙыраҡ йоҡлатып алалар ине.

Өҫтөбөҙҙә кейем дә булманы, аяҡ кейеме табыуы проблема ине. Аслы-туҡлы эшләнек. Бер ваҡыт өлкән апайҙар аяҡтарыбыҙҙағы тишек-мошоҡ итектәребеҙгә ҡарап-ҡарап торҙолар ҙа, беҙҙе йәлләп, ахырыһы, ҡайҙандыр ҡалдыҡ-боҫтоҡ күн киҫәктәре табып, итек тегеп кейҙерҙеләр. Завод яғылмағас, өшөй торғайныҡ. Күн итектәр кейгәс, аяҡтарға йылы булып ҡалды. Һуғыш йылдарында бер генә көн булһа ла ял иткәнемде, өйҙә ҡалғанымды хәтерләмәйем: йә цехты тәртипкә килтерергә йүгерәбеҙ, йә станцияла йөк бушатабыҙ. Ҡайҙа ул ял көнө, тик тороу! Буш йөрөү оят эш һанала ине. Хәйер, быға ваҡытыбыҙ ҙа булманы.

...Бер ваҡыт иртән заводҡа килһәм, митинг бара. Сығыш яһаусы партия вәкиле Ленинградтың блокаданан азат ителеүе хаҡында һөйләне. Быны ишетеп, халыҡ шул тиклем шатланды, үҙебеҙҙе шул тиклем бәхетле тойҙоҡ. Бер-беребеҙҙе ҡосаҡлап илашабыҙ, ҡотлашабыҙ! Заводта Ленинградтан эвакуацияланған халыҡ күп. Совет ғәскәрҙәренең еңеүен ишетеү барыбыҙға ла шул тиклем көслө тәьҫир итте: митингтан һуң комсомолға инеү өсөн ғаризалар бирҙек. Барыбыҙ ҙа әле һуғыш дауам итеүен, һуғыштан һуң да илдәге емереклектәрҙе төҙәтеү, ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, завод-фабрикалар төҙөүгә эшсе ҡулдар кәрәк буласағын анлай инек”.

Һуғыштан һуң Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-ағартыу училищеһын, ситтән тороп Ленинград мәҙәниәт институтын тамамлай, Өфөлә Башҡортостан Мәғариф йорто китапханаһы директоры булып эшләй, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһынан беренселәрҙән булып Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Уға “1941—1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән фиҙакәр хеҙмәте өсөн”, Бөйөк Еңеүҙең тамамланыуына 30, 50, 60, 65 йыл тулыу уңайы менән юбилей миҙалдары тапшырыла. Әлеге хәтирәләрҙе һөйләгән әсәйем дә, Мәрйәм Хисмәтулла ҡыҙы ла бөгөн яҡты донъяла юҡтар инде, икеһе лә 2012 йылда вафат булдылар...

Өфө ҡалаһындағы элекке 8 Март тегеү фабрикаһының Почетлы тегеүсеһе, бөгөн хаҡлы ялдағы Гөлйөҙөм Мостаева һуғыш йылдарында тылда нисек эшләүҙәре тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне:

— Ул ҡәһәрле һуғышты кем генә онотор икән? Һуғыш башланғандың икенсе көнөнә үк атайымды фронтҡа алдылар, әсәйем көнө-төнө эштә, ә мин донъя көтөп өйҙә ҡалам... Донъя көтөп, тигәндән, ололарҙың ҡайтыуына ашарға бешереү, иҙән-кер йыуыу, өй таҙартыу, тегеү-ямау, бәйләү-иләү һәм башҡа эштәр йыл әйләнәһенә барыһы ла минең өҫтә. Һигеҙ йәшем тулғас ҡына уҡырға төштөм. Ул ваҡытта беҙҙең мәктәпте хәрби госпиталгә әйләндергәйнеләр, шуға уҡыу өсөн бина булманы. Ләкин һуғыш йылдарында кешеләр бер-береһенә мәрхәмәтле, ярҙамсыл була белде: бер апай, исемен хәҙер хәтерләмәйем дә инде, өйөндәге бер бүлмәһен класс яһарға тәҡдим итте. Мин шунда уҡыным. Һуңынан мәктәп ҡала психиатрия дауаханаһы бинаһына күскәс, барыбыҙ ҙа еңел тын алдыҡ. Һәр бала класты тәртипкә килтереүгә үҙ өлөшөн индерҙе, барыбыҙ ҙа ололарға ярҙамлашырға тырыштыҡ. Беҙ ни, бәләкәстәрбеҙ, нимә генә эшләй алабыҙ инде? Дауахана ихатаһында ойошторолған өмәләрҙә

ҡатнаштыҡ, яралы һалдаттарға концерттар күрһәттек. Үҙебеҙ сценарий яҙабыҙ, үҙебеҙ уйнайбыҙ, йырлайбыҙ, бейейбеҙ, берәү ҙә ситтә ҡалмай, үҙен өгөтләтмәй, инәлтмәй. Үҙебеҙ аслы-туҡлы уҡыһаҡ та, шулай һалдаттарҙың күңелен нисек тә күтәрергә тырышҡан булабыҙ. Исмаһам, берәүебеҙ илаһа йә зарланһасы! Беребеҙ ҙә үҙен ҡайғыртманы, ә башҡаларҙы уйланы... Ә бит беҙ ул ваҡытта уйнап туймаҫлыҡ сабыйҙар инек!

Беҙ, һуғыш быуыны балалары, иртә өлкәнәйҙек. Бала ғына көйөбөҙгә үлем сигендә ятҡан яралыларҙың һауығыуына шатланыуыбыҙ үҙе үк иртә өлкәнәйеү билдәһе булған икән. Әгәр концерттарыбыҙ яралыларға оҡшап, улар ҡул сапһа, эй, ҡыуанған булабыҙ шуға! Ә инде һалдат һауығып аяҡҡа баҫһа, беҙҙең менән ҡосаҡлашып хушлашып, ҡабаттан фронтҡа китһә, шатлыҡтың сиге булмай. Эй, сабыйлыҡ, шул ваҡытта шатланғандарҙы ғүмерҙә онотаһым юҡ! Ул минең тормошомда һәр ваҡыт яҡты нур һибеп, юл күрһәтеп, ғүмерем буйы оҙатып килде. Мин бик иртә кеше ҡыуандырып, башҡаларға игелек эшләп шатландырыуҙан да яҡшыраҡ нәмә юҡлығын анлап үҫтем. Бер-береңә мәрхәмәтле, ярҙамсыл булырға, башҡаларҙың хәленә инеү, ярҙамға мохтаждарға ярҙам итә белеү кеүек кешелеклелек сифаттарына беҙҙе һуғыш үҙе өйрәтте.

### Беҙ — һуғыштан һуң тыуған балалар!

Һуғыштан һуң ауылдаштарға күтәрелеп китеүе, емерелгән хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу еңелдән булмаған. Һуғыштан һуң тыуған балаларға ла еңелдән тура килмәгән, шул хаҡта ла әйтеп китәйек. Яуҙан ҡайтҡан һалдаттарҙы бөлгөнлөк, сүп баҫҡан яландар, хәйерселек, аслыҡ көткән. Тракторҙар, машиналар иҫке, ватылып эштән сыҡҡан, булғандарын йүнәтерлек түгел. Ҡөндө төнгә ялғап эшләй ҡанаҡайҙар, барыһын да тиерлек ҡул көсө менән башҡаралар. Ҡолхоз председателе Павел Кузнецов һуғыштан әйләнеп ҡайтмағас, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә байтаҡ кеше колхоз председателе булып эшләп ҡарай: Сәйетгәрәй Зәйнетдинов, Миңлеғол Ҡинйәбулатов, Ҡолбулды Аҡбулатов, Әхмәт Ишбирҙин, Мөхәмәҙулла Хисмәтуллин, Минлегәрәй Рәжәпов, Дәүләткәрәй Абыҙгилдиндар... Халыҡ һаман бушҡа эшләй. Әгәр “трудодень” һаны тулмаһа, колхозсыны лагерға ебәрәләр. Хеҙмәт көнөнә 200 грамм бойҙай йәки он биргәндәр. Һуғыштан һуң илдә аслыҡ була, бик күптәр шешенеп, йә иһә яҙын ҡар аҫтында ҡалған башаҡты ашап ағыуланып үлә. Тотош ғаиләләре менән үлгәндәр ҙә күп була. Журналист Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов “Ҡыҙыл Башҡортостан” гәзитендә эшләгәндә шул хаҡта материал йыя, тик баҫтырып өлгөрмәй — уны ҡулға алалар һәм Воркута лагерына ебәрәләр.

Ул йылдарҙың этлеген беҙҙен быуын да татып үҫте. Беҙ, 50-се йылдарҙа тыуған балалар, хәҙергеләр кеүек мәктәпкә матур итеп кейенеп йөрөмәнек, мәктәп ашханаһында тәмле аштар ашап уҡыманыҡ: бер ҡыйырсыҡ икмәккә мөрхәтһенә торғайныҡ. Шуны бер көрөшкә һыуҙа ебетеп ашайбыҙ ҙа, шуның менән вәссәләм! Һигеҙенсене тамамлағас, үҙебеҙҙән ете саҡрымда ятҡан Әхмәр урта мәктәбенә йәйәү йөрөп уҡыныҡ. Беҙҙең бала саҡта матур уйынсыҡтар ҙа, ҡупшы кейемдәр ҙә булманы. Мин, ғөмүмән, үҙемдең донъяға эшләп ашарға килгәнемде бик иртә аңланым. Ә хәл былай булды. Бер ваҡыт атайым, әсәйем, Зәйнулла абзыйым, Йәмилә менән Мәрйәм апайымдар ҡышҡылыҡҡа утын әҙерләй ине. Ҡемеһе быса, кемеһе яра. Шунда Йәмилә

апайым: “Ә ниңә Миләүшәне ҡушмайбыҙ, ҡурсаҡ уйнар йәштән уҙған инде”, — ти. — Әйҙә, берәмләп булһа ла утын ташыһын!” Мин, ҡыуал таяғына башын, күҙен эшләп, ҡәләм осо менән сәсен ҡараға, ауыҙын ҡыҙылға буяп үҙем эшләп алған “ҡурсаҡ”тарымды ташлап, утын ташый башланым. Ысын ҡурсаҡ менән уйнағанымды хәтерләмәйем. Хәйер, бер генә тапҡыр ҡурсаҡ менән уйнап өлгөрҙөм, шуны ла иҫкә алайым. Бер ваҡыт Рәхмәтулла Ҡолмөхәмәтов бабайым Өфөнән беҙгә ҡунаҡҡа килеп төштө (уның тураһында алда әйтеп киткәйнем инде), бабайыбыҙ миңә һәм Наилә һеңлемә ике ҡурсаҡ алып килгән икән, эй шатландыҡ! Эсенә бысҡы ваҡы тултырылған был ябай ғына ҡурсаҡтар миңә хан ҡыҙы кеүек күренде! Ләкин оҙаҡ уйнатырға насип булманы: күрше Бибисара инәйҙәрҙең Шарик исемле эте, беҙҙең уйнаған ерҙә буталып йөрөй торғас, әллә ҡыҙыҡ күрепме, бер ваҡыт ҡурсағымды тешләп алды ла үҙҙәренә ҡайтып китте. Артынан барһам, солан аҫтына ингән дә, әлеге ҡурсаҡты талап ята. Аҙаҡ теткеләнеп бөткән ҡурсаҡ уйнатырға эшкинмәне. Һуғыштан һуңғы быуын балалары мәктәпкә яҡшы кейенеп йөрөмәне, ул йылдарҙа беҙҙән олораҡтар хатта институтҡа ла фуфайка менән йөрөй ине. Ғөмүмән, шул ҡара фуфайка, спецовка, кирза итек совет халҡының төп көндәлек кейеме булды. Беҙ уҡығанда, ярай, мәктәп формаһы булды, юғиһә, ярлылыҡ күҙгә ныҡ ташланған булыр ине. Ғаиләлә беҙ туғыҙ бала булдыҡ, бер-беребеҙҙең кейемен кейеп үҫтек: минең бер ваҡытта ла яңы итегем, яңы галстугым, китаптарым, сумкам булманы — өлкән апайҙарҙан ҡалғаны эләгә ине. Ҡитаптар ҙа кластан-класҡа тапшырылып күсеп килде. Хөкүмәт йылына бер тапҡыр фронтовик балаларына тип пальто, итек, мәктәп формаһы кеүек кейем-һалым менән ярҙам итте, ләкин атайым, ғаиләлә туғыҙ бала булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы алыуҙан баш тартты. Оло апайым Йәмилә яҡшы уҡый ине, мәктәп директоры Миңнулла Вахитов ағай: “Әйҙәгеҙ, бер-ике ҡыҙығыҙҙы Ишембай интернат-мәктәбенә уҡырға ебәрәйек”, — тип килгәс, атайым ризалашманы, “Мин хөкүмәткә ташлар өсөн балалар үҫтермәйем, үҙ балаларымды үҙем ҡарайым”, — тип яуапланы. Шулай ҙа бик оҙаҡ өгөтләгәс, Йәмилә апайымды туғыҙынсы-унынсыға ғына ебәрергә ризалашты. Апайым Ишембай интернат-мәктәбен тик яҡшыға ғына тамамланы, тик кейергә туфлийы, күлдәге булмағанға күрә, “Һуңғы ҡыңғырау” байрамына барманы. Мәрйәм апайыма иһә, һигеҙенсене тамамлағас, әсәйем штапель күлдәк тегеп кейҙерҙе, миңә иһә Йәмилә апайымдың туй күлдәген ҡыҫҡартып кейҙерҙеләр. Әйткәндәй, шул туй күлдәген мин университет студенткаһы булғас та оҙаҡ кейеп йөрөнөм.

Әлеге хәлдәрҙе мин ни өсөн яҙам һуң әле? Ауылдаштарым һәм бер ғаилә өлгөһөндә йәштәргә һуғыш һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙа нисек йәшәүебеҙҙе һөйләгем, анлатҡым килде. Бәлки, булған һайын булғандың ҡәҙерен белмәгәндәр, донъя артынан ҡыуғандар үҙҙәренә фәһем алыр, тим. Тормошта хәл итеп булмай торған ауырлыҡтар, проблемалар юҡ, тыныслыҡтың ҡәҙерен беләйек! Башҡа һуғыш ҡына булмаһын, донъялар имен, тыныс торһон, яңы ғаиләләр ҡоролһон, сабыйҙар тыуһын, инәй-олатайҙар ейән-ейәнсәрҙәрен һөйһөн, әсәйҙәр улдарын һуғышҡа оҙатмаһын. Күҙ йәштәре түгелмәһә, бомбалар шартламаһа, аслыҡ-юҡлыҡ булмаһа, киләсәктә барыһы ла яҡшы булыр!